*Әлфиә КӘРИМОВА,*
*филология фәндәре кандидаты*

# Башҡорт әҙәбиәтендә дастан жанрының теоретик нигеҙҙәре

Һәр милли әҙәбиәт үҙенең жанрҙар системаһы, үҙенсәлекле эволюцияһы менән айырылып тора. Башҡорт әҙәбиәте тарихына күҙ һалһаң, асыҡтан-асыҡ күренә: ғәйәт бай традициялар ерлегендә осорҙоң үҙенә генә хас сифаттары әҙәби фекерҙе үҫтереүгә булышлыҡ иткән. Асылда һүҙ сәнғәте барлыҡҡа килгәндән алып, бөгөнгө көнгәсә ярайһы уҡ арауыҡты үтеп, уның формаһына, йөкмәткеһенә бик күп төрлө йоғонто яһалған. Был бигерәк тә жанрҙар формаһында асыҡ сағыла. Әҙәби жанр — тарихи категория. Ул ниндәйҙер бер дәүерҙә тыуып, боронғо антик һәм урта быуаттарҙа тотороҡло жанр сифаттарына һәм системаһына эйә булып, баҙыҡланыуына ҡарамаҫтан, өҙлөкһөҙ үҫеүен, үҙгәреүен дауам итә.

"Һәр бер жанр үҙ алдына ғына ла йәшәмәй, ул бүтән жанрҙар менән тығыҙ мөнәсәбәткә инә. Ғәҙәттә, бер жанрҙың ҡайһы бер сифаттары икенсе бер жанрҙарға ла күсеп китә, жанр-ара һыҙаттар хасил була"[1], — тип билдәләй Ғ.Хөсәйенов. Башҡорт әҙәбиәтендә лә жанрҙарҙың үҙенсәлекле үҫеш юлы, төрлө йоғонтолар кисереүе күҙәтелә. Милли әҙәбиәттә һәр жанрҙың ҡатмарлы эволюцияһы бар. Ләкин профессор Р.Байымовтың фекеренсә: "Беҙ көнбайыш йәки Шәрек әҙәбиәте ҡанундарына яраҡлашып, уларҙа булған формаларҙы ғына ҡабул итеп, милли әҙәбиәтте традицион йә догматик ҡалыптарға ғына һалырға өйрәнгәнбеҙ. Шул уҡ ваҡытта һәр милли әҙәбиәттең үҙенә генә хас әҙәби жанрҙары, ижади ысулдары булыуын онотабыҙ"[2].

Дастан башҡорт әҙәбиәтендә шулай уҡ киң таралған, ярайһы уҡ милли әҙәби һыҙаттары менән байытылған жанр. Уны Көнсығыш әҙәбиәтенең традицион эпик жанрҙарының тажы тип атарға мөмкин. Теоретик күҙлектән ҡарағанда, был жанрға төплө, барлыҡ үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып аңлатма бирелгән: "Дастан — эпический фольклорный жанр тюркоязычных и фарсиязычных народов, основанный на легендах и преданиях. Состоит из перемежающихся стихотворных и прозаических частей. Позднее — жанр устной и письменной литературы. Стихотворный дастан бывает двух типов: 11-сложный и 7—8-сложный. В классических тюркоязычных литературах дастаном называются отдельные романтические поэмы (например, "Лейла и Меджнун", "Хосров и Ширин", "Искандер-наме" Низами) или главы из больших эпических поэм (например, из "Шахнаме" Фирдоуси). В советскую эпоху произведена огромная работа по записям дастанов. Особенно важные записи сделаны в Узбекистане, где выявлены огромные фольклорные богатства. Среди узбекских дастанов имеются народные варианты поэм Алишера Навои и других поэтов и новые советские дастаны на темы о падении ханской власти в Бухаре в 1920 г., о борь-

бе с басмачами, о земельно-водной реформе 1927 г., о гражданской войне, о Ленине. Дастаны, как правило, имеют шаблонное начало и концы. Описание действий и образов схематично и неизменно"[3].

Дастан жанры һәм жанр формалары урта быуаттарҙа уҡ башҡорт әҙәбиәте ерлегендә "күсмә сюжеттар" ярҙамында күренә башлай. Күберәк уларҙа мөхәббәт йәки ҡаһарманлыҡ, фантастик сюжет өҫтөнлөк иткән. Жанрға нигеҙ һалыусы "күсмә сюжеттар" башҡорт ерлегенә ерегеп, байтаҡ ҡына үҙгәрештәр кисергән, тиҫтәләгән яңы варианттар барлыҡҡа килгән. Уларҙа иһә географик атамалар, персонаж исемдәре генә түгел, ә сюжет ептәрен тәшкил итеүсе ваҡиғалар ҙа трансформация кисергән. Шуға ла урта быуаттарҙа башҡорт әҙәбиәте ерлегендә барлыҡҡа килгән дастандарҙың тулыһынса милли һыҙаттары формалашҡан. Көнсығыш әҙәбиәтендә Фирҙәүсиҙең "Шаһнамә", Низамиҙың биш поэманан торған "Хәмсә", Науаиҙың "Искәндәрнамә" кеүек поэтик әҫәрҙәре дастандың классик өлгөләре иҫәпләнә.

Урта быуаттарҙа төрки әҙәбиәттәрендә дастан жанрының баҙыкланып етеүе күҙәтелә. XIV быуатта майҙанға килгән төрки халыҡтарының ҡомартҡылары булып әүерелгән Хәрәзмиҙең "Мөхәббәтнамә", Ҡотбтың "Хөсрәү вә Ширин", С.Сараиҙың "Гөлөстан бит-төрки", "Сөйәһел вә Гөлдөрсөн", Кәтибтең "Жөмжөмә солтан" дастандары ошо фекерҙе ҡеүәтләй. "Поэтик яҡтан шаҡтай юғары кимәлдә булған был дастандарҙа жанр поэтикаһының героик, романтик тәбиғәте, ҡаһармандары, композицион-структур ҡоролошо, традицион поэтик алымдары, ҡанунлашҡан тел-стиль саралары, романтик формалары камиллашып етә. Бүтән жанр формаларын структур, композицион өлөш рәүешендә индереп ебәреү, ижади һеңдереү ысулдары асыҡлана. Көнсығыш традицион сюжеттарына нигеҙләнеү — нәзирә, ижади тәржемә, контаминация методтары иркен ҡулланыла"[4], — тип билдәләй Ғ.Хөсәйенов.

Урта быуаттарҙағы төрки әҙәбиәтендәге дастан традициялары башҡорт әҙәбиәте ерлегендә лә ярайһы уҡ киң йәйелдерелә. "Буҙйегет", "Таһир менән Зөһрә", "Сәйфелмөлөк", "Иҙеүкәй менән Мораҙым", "Алдар менән Зөһрә" әҫәрҙәрендә жанр формалары һәм жанр традициялары ярылып ята.

"Буҙйегет" дастаны жанрҙың төрлө үҙенсәлектәрен берләштерә. Әҫәрҙең байтаҡ ҡына варианттары бар, ә "Башҡорт халыҡ ижады" томдарында дүрт варианты бирелгән. Сюжет һыҙыҡтарының төп мотивтары һаҡланһа ла, варианттар бер-береһенән айырыла.

"Буҙйегет" дастаны композицион яҡтан ҡыҙыҡлы һәм ҡатмарлы ғына. Әҫәрҙә теҙмә телмәр сәсмә телмәр менән аралашып килә. Унда бөтә шиғри юлдарҙы ҡобайыр ҡалыбына тура килә тип булмай, шулай ҙа саф ҡобайырҙар осраштырғылай. Айырыуса әйтеш рәүешендә башҡарылған түбәндәге ҡобайыр, төрлөсә үҙгәрештәр кисерһә лә, нигеҙҙә, тотороҡло һаҡлана:

Дөйә килеп буҙҙаһа,
Бутаһы аның бар микән?
Бута күҙле Буҙйегеттең
Был уйында бар микән?

"Буҙйегет" дастанының сюжеты жанрға хас төш алымынан башланып китә. Үҫмер егет Буҙйегет төшөндә бер һылыуҙы күреп, хайран ҡала. Төш бер тапҡыр ғына булмай, әленән-әле ҡабатланып тора. Дастан геройы төшөндә күргән һылыуға башкөллө ғашиҡ була һәм дуҫы Ҡәмәнгә һөйләй. Ҡәмән дуҫы

барыһын да аңлай, Буҙйегеткә был ҡыҙҙы эҙләп сәфәргә сығырға тәҡдим итә. Юл ауыр, үҙенә күрә ҡаршылыҡтар ҙа һағалап тора. Тәүҙә дейеү бәрейҙәренең ҡулына эләгеп, дүрт йыл ҡоллоҡта булалар. Был илдән диңгеҙ буйына төшөп, кәмә менән ҡасып китәләр. Тап ошо ваҡиға әҫәрҙең романтик стилен сағылдыра. Әҫәр геройында ҡаһарманлыҡ, үҙ маҡсатына ынтылыш тулыһынса сағыла. Төшөндә күргән ҡыҙ Сәхипъямал йәшәгән ҡалаға килеп етәләр. Сәхипъямал да төшөндә егетте күреп, ҡырҡ ҡыҙын уны эҙләргә сығарып ебәрә.

Дастандағы төш алымы әҫәрҙең сюжет тығыҙлығын барлыҡҡа килтерә, ваҡиғаларҙы бер-береһенә бәйләп тә тора. Бик күп ауырлыҡтар аша Буҙйегет һөйгән ҡыҙы Сәхипъямалды осратып, ҡауышалар. Ләкин был бәхетле мәл самалы ғына. Ҡыҙҙың атаһы Таймаҫ хан был яңылыҡтарҙы белеп ҡала, ҡырҡа кире һуға. Хандың: "Был минең ҡыҙымды бик аҙҙырып бөткән икән, үлтерергә кәрәк уны!"[5] — тигән һүҙҙәре бәхетле яҙмыштарҙы уртаға яра. Дастандың төп конфликты традицион өсмөйөштө барлыҡҡа килтерә. Ләкин был бәйләнештә Буҙйегет Таймаҫ хандың биш мең баһадирын, ун биш мең һалдатын һәләк итә. Геройҙың ҡаһарманлығы, таһыллығы әҫәрҙә бик ентекле һөйләнелә. Артабан Таймаҫ хан хәйләгә барырға була. Ҡыҙын Буҙйегеткә бирергә ризалаша ла, туйҙа кейәүен йөҙ баһадирҙан үлтертергә була. Ләкин был хәйлә тоҙағынан да дуҫы Ҡәмән һәм һөйгәне Сәхипъямал ярҙамында ҡотола. Тағы ла егеттең ҡаһарманлығы, бик күп дошманды һәләк итеүе һүрәтләнә. Дастан жанрына хас гипербола алымы әҫәрҙә йыш ҡулланыла: "Хандың өс мең баһадирын үлтерә, үҙе етмеш ерҙән яралана"[6]. Шулай уҡ текста бик күп һүрәтләү саралары, поэтик фонетика, стилистик фигуралар — жанрҙың айырылғыһыҙ яҡтары.

Ун көн эсендә тән яраларынан арынғас, ҡалаға килеп, дуҫы ярҙамында йән һөйгәне менән осрашалар. Ләкин бер ҡарсыҡ өйөндә осрашҡан ике йәш йәр тураһында Таймаҫ ханға еткерәләр. Хан бик күп баһадирҙар ебәреп, Буҙйегетте тоттора. Таймаҫ хан был осраҡта үҙенең теләгенә өлгәшә, Буҙйегетте үлтертә. Ләкин был трагедияның башы ғына. Тап ошо үлем Сәхипъямалды һәм ата-әсәһен, Ҡәмәнде лә теге донъяға алып китә.

Сәхипъямал һылыуҙың атаһы ни тиклем ҡыҙыу ҡанлы, яуыз холоҡло, аяуһыҙ, ҡаты ҡуллы булмаһын, уға ла бала һөйөү, бала ҡыуандырыу, уға ҡарап һөйөнөү, йыуаныу тойғоһо хас. Әммә шул бәхет тигәнде ҡыҙы бер төрлө, ул икенсе төрлө аңлай. Ҡыҙы йән һөйгәне менән ҡауышыуҙа күрә бәхетте, ә хан — үҙе кеүек хан затлы кеше менән. Үҙенең шул ҡарашынан сығып, Зәйтүн ханды кейәү итеп күрә. Шуға күрә ниндәйҙер бер билдәһеҙ егет менән ҡыҙының ҡауышыуы уның енен сығара. Таяҡты тотҡан урындан һындырғансы, кеше һүҙе — кеше һүҙе инде, кем икән ул егет, тип белешәһе ине лә Буҙйегет хаҡында. Әммә меңәрләгән яугирын һәләк иткән ул. Хан, үҙенең һүҙен генә һүҙ иткән, әллә нисәмә ҡорбанға, шул иҫәптән ҡыҙының һәләкәтенә лә сәбәпсе булған хан, нескә хискә лә эйә. Буҙйегетте яҙалатҡас, үпкәһен әйткән Сәхипъямалды хәс тә сабыйҙы йыуатҡандай йыуата:

Илама, ҡыҙым, илама,
Ил эсендә яҡшы күп,
Илдән илгә йөрөрмен,
Затлы ир-ат күрермен,
Илдә яҡшы табылһа,

Һине уға бирермен.
Башымдағы тажымды,
Аҫтымдағы тағымды,
Ҡыҙым, һиңә бирермен...

Буҙйегет тә йән дуҫы менән һуңғы осрашыуында ата-әсәһенә сәләм күндерергә аманат әйтеү менән бер рәттән, үҙенән рәнйегәндәрҙең, күңеле ҡалғандарҙың риза булып ҡалыуын теләй. Шуның менән ул үҙен был донъянан рухи пакланып китеүен ҡайғыртыусы кеше итеп күрһәтә.

"Буҙйегет" дастанында жанрҙың барлыҡ компоненттары ла ярылып ята. "В дастане метафоры, аллегории, аллитерации, гиперболы, эпитеты и другие художественные средства имеются главным образом в стихотворной части"[7]. Дастанда төрлө һүрәтләү саралары киң ҡулланыла. Уларҙың һәр береһе персонаж характерын, тышҡы динамиканы барлыҡҡа килтерә. Буҙйегеттең телмәрендәге эпитеттар:

Туҙан баҫҡан юлымды,
Ҡайғы баҫҡан күңелде,
Асылыр көн булырмы?

Сағыштырыуҙар:

Йәндәй һөйгән еремде
Мин күрергә ашҡынам![8]

Улар герой характерының кисерештәрен тәрәнәйтеп ебәрә. Шулай итеп, "Буҙйегет" дастанында исламғаса булған тәртип, йолалар, орнаменталь хәлдәге ифологик фекерләү башланғыстары, ислам тәғлимәте аша үткәрелеп, уға яраҡлаштырылып, дөйөм сюжеттың үҫешенә үҙ өлөшөн индерә. Саф исламға башланғыстар иһә күпселектә орнаменталь вазифа үтәүҙе үтеп, сюжет үҫтерелешендә хәл иткес роль уйнай. Шуның менән бергә байтаҡ архаик күренештәр үҙҙәренең халыҡсанлығын һаҡлап ҡалған. Шуның өсөн дә улар башҡорттарҙың фекерләүенә, донъяға ҡарашына хуш килгән. Был иһә, аҙма-ҙыс өлгөһө булған "Буҙйегет" дастанының башҡорттар араһында киңләп таралып, яңы милли ерлектә жанрҙың төрлө үҙенсәлектәре барлыҡҡа килеүгә сәбәпсе булғандыр.

Башҡорт ерлегендә "Сәйфелмөлөк" дастанының бер-нисә варианты бар. Профессор Ә.Сөләймәнов был дастандың сюжеты тылсымлы әкиәт сюжетына яҡын тип билдәләй[9].

Урта быуаттарҙағы байтаҡ дастандарҙағы кеүек, "Сәйфелмөлөк" сюжеты ла динамик хәрәкәткә, традицион мотивтарҙың ҡабатланып килеүенә нигеҙләнгән. Дастанда мөхәббәт ваҡиғалары төрлө ҡапма-ҡаршылыҡлы ваҡ-ваҡ ваҡиғалар менән ҡаймаланып алыныуы күҙәтелә.

Сәйфелмөлөк һунар сағында "әҙәмгә лә, хайуанға ла оҡшамаған һыңар күҙлө йән ейәһе" көйҙөрөп киткән иҫке тунда әтәс ҡысҡырған мәлдә генә күренгән ҡыҙҙы күреп ғашиҡ була. Сәйфелмөлөктө һарыларға һабыштыра был ҡыҙ. "Ул ҡыҙ донъяла бар. Ул ендәр батшаһы Күк ҡарғаның иң кесе, ун бишенсе ҡыҙы". Ләкин күрәҙәсе артабан: "Уны минең апайым ғына белә. Уға ете диңгеҙ аша үтеп кенә барып була", — тип аңлата. Дастанда һәр сюжет артабан үҫеүе өсөн ниәт-сәбәп формаһын ала. Быға ҡыҙ һүрәтен күрһәтеүсе тун, уны эҙләргә мәжбүр итеүсе зат, ҡыҙ һүрәтенең төнгә әтәс ҡысҡырған мәлдә генә

“тун-экранда” пәйҙә булыуы, күрәҙәсенең өс тау, өс диңгеҙ аръяғында, ә унының уртансы апаһының ете диңгеҙ аръяғында йәшәүе тураһындағы мәғлүмәттәр менән ҡуйыртыла башланған фантастик башланғыстар дастандың сюжетын бер епкә туплай.

Күрәҙәсенең уртансы апайына барыу юлы билдәле булыуы Сәйфелмөлөктөң юлға сығыуына, тимәк, сюжет йомғағының әле дауамына ишара. Артабан уға икенсеһе, өсөнсөһө өҫтәлә. Шулай итеп, мотивҡа — мотив, эпизодҡа — эпизод ялғана, тармаҡлы сюжет барлыҡҡа килеп, дастан жанрының үҙенсәлектәре һаҡланып ҡала. Иғтибар итһәң, мажаралы сюжет һыҙыҡтары ла жанрҙың бер һыҙаты. “Сәйфелмөлөк” дастанында дауылда карап ҡыйралыуы арҡаһында, Сәйфелмөлөктөң ҡырағай кешеләргә юлығып, уларҙың батшаһының ҡыҙы менән ҡауышыуҙан ҡасып, унының уртансы күрәҙәсе менән осрашыуын тиҙләтә. Ә “Урал батыр” эпосында Урал былдай теләктәрҙе кире ҡаҡмай, өйләнә бара. Әммә был осрашыу, егет көткәнсә, үҙе эҙләгән ҡыҙ менән тура ғына күрешеү минуттары етеүен аңлатмай. Тағы ла сюжеттың тармаҡланыуы, мажараның артыуы күҙәтелә.

Дастандың сюжеты баҫҡыслап-баҫҡыслап, композицион өсләтеүҙән ғибәрәт. Ике күрәҙәсене үткән Сәйфелмөлөк өсөнсөһөнә, тегеләренең өлкәненә юлыға. Мажаралы сюжетты үҫтереүсе апайҙан апайға күскәндә геройға “ышаныс ҡағыҙы” вазифаһын атҡара торған берәй әйбер бирә. Уртансы апай, олоһона юл өйрәткәндә уға тапшырыу өсөн, балдаҡ бирә. Тап ана шул балдаҡ үҙенә күрә таныртма, ышаныс ҡағыҙы вазифаһын үтәй.

Дастанда композицион өсләтеү апайҙарҙың араһындағы арауыҡ үлсәме арта барыуы менән дә һыҙыҡ өҫтөнә алына. Кесе күрәҙәсе өс тау, өс диңгеҙ аръяғында йәшәһә, икенсеһенең — ете диңгеҙ, өсөнсөһө — туғыҙ диңгеҙ, туғыҙ тау аръяғында йәшәүе хаҡында асыҡ итеп әйтелеүе — арауыҡтың киңәйә барыуы менән бер. Тимәк, әҫәрҙә арауыҡтың киңәйеүенә мөһим художество бурысы йөкмәтелә. Дастанда Сәйфелмөлөктөң әллә ни хәтлем киң арауыҡты үҙләштереүен күрһәтеү — һүрәте буйынса үҙенә ғашиҡ булырға мәжбүр ҡыҙҙы егеттең етди яратыуын, шуға ла унының тырышып эҙләүен төшөндөрөүгә хеҙмәт итә.

Геройҙы бер ярҙамсының икенсе ярҙамсыға, унының өсөнсөһөнә ебәреүе айырым мотив рәүешендә дастанды тармаҡландырһа ла, уларҙы бәйләп тороусы, динамик хәрәкәттәргә нигеҙләнеүсе идея ярылып ята. Өсөнсө күрәҙәсенең Сәйфөлмөлөккә әйткәне кимәленән ҡарағанда, ни тиклем генә егет үҙе күреп белмәгән ҡыҙҙы тәкәтһеҙ яратмаһын, барыбер үҙ аллы эш итеүҙән йырағыраҡ тора. “Сәйфелмөлөк” дастанында герой өсөн күрәҙәсе өс апай сюжеттың өс быуыны буйына нәүбәтләп программа төҙөп тороусы хеҙмәтен үтәй.

Сәйфелмөлөктөң, ҡыҙ менән осрашып, уны үҙенә ҡаратыуға ирешеүе — өлкән күрәҙәсенең кәңәштәрен еренә еткереп үтәүе һөҙөмтәһе. “Дейеү батшаның ун ике ҡыҙы булыр. Улар һәр көн иртән ун ике аҡҡош булып, ҙур күл буйына осоп килерҙәр. Күлдең уртаһында ҡуйы ҡыуаҡлыҡтар менән ҡапланған утрау булыр. Ун икеһе лә килерҙәр ҙә, сисенеп һыуға сумырҙар. Ун бере бер урынға, ун икенсеһе икенсе урынға сисенер. Һин уларҙың сисенгәнен ҡарап тор ҙа ун икенсе ҡыҙҙың кейемдәрен алып йый. Тик һин уны күреп һуштан яҙмаҫ өсөн кәнфит ҡап, ә ҡыҙ һине ятһын өсөн, һеңлем биргән балдаҡты унының урта бармағына кейҙер”[10]. Бына шундай кәңәш бирә өлкән апаһы. Һәм

шул ғәмәлгә аша. Ун бер ҡыҙ күлдән сығыу менән: “Фу-фу, әҙәм есе килә” — тиешеп, тиҙ генә аҡҡош тундарын кейеп, осоп китә. Ун икенсеһе кейемен эҙләп таба алмағас: “Әгәр ҡатын-ҡыҙ булһаң, мәңгегә ҡыҙ булырмын, әгәр ир-зат булһаң, мәңгегә йәр булырмын, тик, зинһар, кейемемде бир”[11], — тип әйтергә мәжбүр була.

Ҡыҙҙы ҡулға төшөргәс тә Сәйфелмөлөк өсөн һынауҙар туҡтамай. Дастан жанрына хас булған өҫтәмә ҡыйынлыҡ етәрлек. Ун икенсе ҡыҙҙы үҙенә йәр итеү өсөн Сәйфелмөлөк дейеү затлы ҡайныһы ҡуйған өс шартты еренә еткереп үтәй: энә күҙенә уҡ ата, ҡара айғырға (асылда, шундай ҡиәфәткә ингән дейеү — ҡайныһына) атланып, сабышҡа сыға, уның бер иш ун ике ҡыҙы араһынан иң кесеһен танырға өлгәшә.

Ләкин дастандың сюжеты тағы ла ҡатмарлана, герой алдына тағы һынауҙар ҡуя. Быға тиклем дә өс һынау үткән Сәйфелмөлөк йәнә өс һынауға дусар ителә. Өс шарт үтәлһә лә, ен батшаһы, ун икенсе ҡыҙын Сәйфелмөлөккә етәкләп кенә ебәрәһе урынға, уларҙың икеһен дә эҙәрләй башлай. Шул рәүештә мөғжизәле баҫтырыш китә. Дейеү ғәскәр ебәрһә лә, үҙе баҫтырһа ла, ҡыҙ таҫтамал һелтәп, дарья барлыҡҡа килтерә, шунан үҙен дә, егетен дә төрлө сүрәткә индереп (көтөүсе, сиркәү, ағас, һарыҡ көтөүе, сиркәү ҡарауылсыһы итеп), икеһен дә ҡыуғындан ҡотҡара.

“Сәйфелмөлөк” дастанында герой өҫтөнә төшкән һынауҙар, һүрәтен күреп, ул ғашиҡ булған ҡыҙ менән осрашҡанға тиклем нигеҙҙә хәл ителеп, аҙаҡ өҫтәлмә рәүештә бары бер тапҡыр ҡабатланһа, һуңғыһында ул саманан ашып китә. Быға ҡыҙҙың атаһы ҡуйған шарттарҙы үтәүҙә тасуирланған эпизод һүрәтләнгәндән һуң, дастан сюжетының кинәт “мөғжизәле баҫтырыш” тибындағы сюжет менән контаминациялашыуы сәбәпсе булған.

Дастандың композицияһын ҡатмарлаштырырға тырышыу уның башланышында уҡ күҙгә ташлана. Унда Рабиғелмөлөк батшаның бала бәхете күрә алмай яфаланыуы, ярандарының кәңәше буйынса яңынан никахланғас ҡына Сәйфелмөлөк тигән улы донъяға килеүе бәйән ителә.

Дастанда ҡушма сюжет алымы ла ҡулланыла. Сәйфелмөлөк менән танышҡас, ун бер йылын дейеү әсирлегендә үткәргән Мәликә уға үҙенең башынан үткәргәндәрҙе, шуға бәйләп, күп михнәттәр кисереп, геройыбыҙ эҙләп йөрөгән Бәҙеғолъямалдың тәржемәи хәлен бәйән итеп ташлай. Шулай итеп, төп сюжет үҫтерелеше кинәт туҡталып, ҡушма сюжетҡа юл асыла. Артабан иһә, туҡтап ҡалған төп сюжет менән ҡушма сюжет бергә ҡушылып, бер бөтөндө тәшкил итә. Был үҙгәреш иһә, нигеҙҙә, Сәйфелмөлөктөң һорауы буйынса Мәликәнең дейеүҙән уның йәнен ҡайҙа һаҡланыуын белешеүҙән башлана.

Дастандың композицион яҡтан йәнә бер үҙенсәлеге шунда: уҡыусыны таныштырып үткән эпизодтар, атап әйткәндә, Сәйфелмөлөк менән Мәликә танышҡандан алып, дейеүҙе үлтереп, ҡыҙҙың иленә ҡайтып етеп, егет тәхеткә ултырғанға тиклемге ваҡиғалар өр-яңынан бәйән ителә. Был алым Мәликә менән Бәҙеғолъямалдың осрашыуын тасуирлағанда ҡулланыла.

“Сәйфелмөлөк” дастанында мөғжизә геройҙың йә ен, йә бәрей, йә дейеү ҡыҙына, уның үҙен күрмәҫтән үк, ғашиҡ булыуында ғына түгел, ә был әҫәрҙә тылсымға ҙур урын бирелеүендәлер. Мөғжизә дастан жанрында йыш ҡулланыла. Шуға ла, аллә ни хәтле михнәт сигеп эҙләй торғас, Сәйфелмөлөк ят заттың үҙенә үлеп ғашиҡ булырға мәжбүр иткән ҡыҙын алыуға өлгәшә.

Мифик-демонологик ҡыҙҙы кәләш итеп алыу бары фантастик уйҙырмалы әҫәрҙәрҙә генә булыуы ихтимал. Башҡорт дастандарында тылсым, новеллистик алымдар сюжетты байыта һәм үҙенсәлекле итә.

Ғөмүмән, "Сәйфелмөләк" дастаны күләм йәһәтенән йыйнаҡ булыуына ҡарамаҫтан, уның сюжеты бер нисә тематик мотив һәм үҙ аллы сюжеттар берегеүенән хасил булған.

"Таһир менән Зөһрә" дастанының яҙма варианты Башҡортостанда киң таралған. "Яҙма һәм телдән һөйләү формаһында йәшәүҙәренә бәйле уларҙың үҙ үҙенсәлектәре шаҡтай булһа ла, яҙма дастан менән халыҡ дастанын — эпосын берләштергән уртаҡ һыҙаттар ҙа күп: улар барыһы ла тиерлек героик йөкмәткеле, романтик рухлы; идеаллаштырылған эпик геройҙар, мөхәббәт ҡаһармандары үҙәктә тора; сюжет ғәҙәттә үтә мажаралы һәм үткен; геройҙарҙың төркөмләнеүе һәм һүрәтләнеше киҫкен контраҫҡа ҡорола; шиғри эпик хикәйәләү һәм тасуирлау поэтик стилдәрен билдәләй"[12], — тип һығымта яһай Ғ.Хөсәйенов.

"Таһир менән Зөһрә" дастаны тематик яҡтан мөхәббәт темаһын дауам итә. Әҫәрҙең үҙенә күрә үҙенсәлекле традицияларын, жанр үҙенсәлектәрен күрергә мөмкин. Тағы ла дастанда йыш ҡабатланып килгән мотивтар ҙа осрай. "Таһир менән Зөһрә" ҡатмарлы композициялы, тармаҡланған сюжеты, бай характерҙары менән айырылып тора. Сюжеттағы ваҡиғалар ике быуындың яҙмыштарын бер нисә епкә бәйләй.

Оҙаҡ балалары булмаған хан менән вәзир һунарға китә. Ә уларҙың әйләнеп ҡайтыуына ҙур шатлыҡ: хандың — ҡыҙы, вәзирҙең улы тыуыуы тураһында хәбәр көтөп тора. Тап ошо мотив "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" әҫәрендә лә бар. Үҙҙәре йортта юҡта ҡатындары бала табыуы символик мәғәнәгә эйә. Әле тыуып та өлгөрмәгән, улай ғына ла түгел, тыуымға ла килмәгән балаларҙың яҙмышын бәйләү мотивы ла башҡорт әҙәбиәтендә йыш осрай. Атай булыу бәхетен татығылары килгән ике уҙаман шуның менән көтөп алған балаларының имен-аман тыуыуын гарантиялаған, өмөткә өмөт ялғаған. "Икеһенең дә бик оҙаҡ балалары булмаған, икеһе лә ырым яраҡҡан. Шунан юлда һүҙ ҡуйышҡандар: батшаның ҡыҙы булһа — Зөһрә тип ҡушып, вәзирҙең малайы булһа — Таһир тип ҡушып, икеһен ҡауыштырырға"[13].

Таһир менән Зөһрәне лә йәрәштерәләр, аталары туҫтаҡ эсешәләр. Ике ҡоҙаның бер туҫтаҡтан аҡ эсеүе — икеһенең уртаҡ ниәттә булыуы. Ҡымыҙҙы уртаҡлашыу балаларға ырыҫ, аҡ киләсәк теләүҙе лә, тимәк, ҡоҙалашҡан ике яҡҡа ла уртаҡ бәхет, тиң бәхет көҫәүҙе лә аңлатҡан. Ҡыҙ һәм малай бергә уйнап, әҫенешеп үҫә. Улар бер-береһенән башҡа донъяны күҙ алдына ла килтермәй, әйтерһең дә, бер бөтөндөң ике яртыһы.

"Таһир менән Зөһрә" дастанының геройы атаһынан иртә етем ҡала. Зөһрәнең атаһы килешеүҙе боҙа: бишек туйы үҙгәрып, ҡыҙының ҡолағын тешләтеүҙе тиҙ онота.

Тап бына шул өс мотив — балалар тыумаҫ элек үк уларҙы йәрәштерергә һүҙ ҡуйышыу, бишек туйы үҙгәрыу һәм ҡыҙҙың атаһының килешеүҙе боҙоуы сюжеттың артабанғы үҫешен тәьмин итә лә инде. Ҡарамаҡҡа, был өс мотив үҙ-ара ваҡыт һәм логик эҙмә-эҙлелектә генә түгел, сәбәп — һөҙөмтә бәйләнеше ярҙамында бер-береһенә тағылышып килә. Әммә, асылында иһә, улай уҡ түгел. Дөрөҫ, тәүге икәүһендә, ысынлап та, эҙмә-эҙлелек ҡағиҙәһе еренә еткерелеп

бойомға аша. Икенсеһендә сәбәп — һөҙөмтә түгел, ә һылтау ярҙамында ғына тағыла: атаһыҙ егеткә ҡыҙ биреү яҙыҡ. Быныһы һылтауҙың бер яғы ғына. Икенсенән, бишек туйынан һуң “һырға туйы”, “никах туйы” үткәреү мәжбүри һәм фарыз түгел. Дастанда Зөһрәнең атаһы ошо принциптарҙы нигеҙ итеп ала. Ана шул бер һылтауға икенсеһе ҡушылыуы уға егет менән араны алыҫлаштырыуға килтерә. Зөһрәнең атаһы Таһир менән араны алыҫлаштырыу өсөн егетте үҙенән йыраҡайта: әйтеп үтелгәнсә, сей тирегә урап, һандыҡҡа һалып, Шат һыуына ағыҙа. Зөһрәнең атаһының Таһирҙы ағыҙып ебәреүе киң мәғәнәгә эйә. Был иһә михнәттең башы ғына, Зөһрә менән Таһир мөхәббәте кисергән тәүге һынау ғына. Икенсеһе лә көттөрмәй. Шат һыуынан һандыҡты тотоп алған ҡыҙҙар Таһирҙы күреп шатланыша. Эш шуға тиклем барып етә — Таһир уларҙың береһен алырға мәжбүр ителә. Был Зөһрә өсөн тағы бер һынау була. Тик ул инде ҡәҙимге һынау түгел, иң-иң язаға тиң ауыр һынау. Зөһрә өсөн өсөнсө һынау, һынауҙың да һынауы — Таһир илгә ҡайтып инеп, инде ҡауыштыҡ тигәндә генә, уны мәңгелеккә юғалтыуы. Мәғәнәүи яғы шул: әҫәрҙең экспозицияһы өмөтләндергәнсә, асылында, ҡайны-кейәү мөнәсәбәтенә инергә тейеш кешеләрҙең араһы күсмә мәғәнәлә лә, тура мәғәнәлә лә алыҫлаша. Элекке дуҫының улы менән ара алыҫлаштырылыуы сюжеттың, артабан экспозиция “вәғәҙә иткән” һыҙыҡтан тайпылып, көтөлмәгән бөгөлөштәр, киҫкен боролоштар яһай-яһай, йылдам үҫеп китеүенә стимул тыуҙыра. Һөйгәндәрҙе бер-береһенән айырыу уларҙың характер ныҡлығын, үҙенсәлекле һыҙаттарын аса. Дастан жанрына хас мөхәббәт романтикаһы “Таһир менән Зөһрә” әҫәренең аҙағында трагик ноталарҙа тамамлана. Таһир үлтерелгәс, Зөһрә үҙ-үҙенә ҡул һала. Зөһрәнең Таһирҙан башҡа был донъяла йәшәүҙән мәғәнә тапмауы мөхәббәттәренә тоғро булыуҙарын күрһәтә. Егет менән ҡыҙҙы башҡа ерләһәләр ҙә, уларҙың ҡәберҙәренән үҫеп сыҡҡан гөлдәр бер-береһенә үрелеп, үлгәс булһа ла ҡауышыуҙарын символлаштыра.

“Таһир менән Зөһрә” дастанында ла мөхәббәттең романтик яҡтары сағылған. Башҡортостанда табылған дастан варианттары “күсмә сюжетҡа” нигеҙләнеп ижад ителгән. Ләкин был мотивтарҙа ерле халыҡтарға ғына хас һыҙаттар, йола элементтары ярылып ята. Шулай уҡ “Таһир менән Зөһрә” дастанында геройҙарҙың мөхәббәт коллизияһының сиселеше ҡатмарлаша. Таһир менән Зөһрәнең икәү-ара аңлашыуы уларҙы йәмғиәт тәртибе һәм атай хоҡуғы тигән йола ҡануниәте менән ҡаршылыҡҡа килтерә, ауыр һынауҙарға дусар итә. Тап ошо һынауҙар сюжет һыҙығын тармаҡландыра ла. Дастанда характер һыҙаттары ла ошо йүнәлештә, мөхәббәт һынауҙары аша үткәндә асыла бара. Шулай уҡ жанрҙың романтик рухын сағылдырған һүрәтләү саралары ла башҡорт һүҙ сәнғәтенең бай нигеҙҙәрен күрһәтә.

“Алдар менән Зөһрә” эпик ҡомартҡыһының сюжеты, идея-тематик йөкмәткеһе шаҡтай ҡатмарлы һәм мажаралы. Әҫәрҙә дастан жанры формалары иркен ҡулланыла. Әҙәби ҡомартҡының дастан традицияларына яҡын әҙәби форма алып китеүе күҙәтелә. Әҫәрҙә фольклор менән әҙәбиәт поэтикаһы тағы ла тығыҙыраҡ үрелә. Дастандың төп жанр һыҙатын һәм поэтикаһын романтик сюжет, романтика һәм фантастика, эпик һүрәтләүҙәр билдәләгәнлеген әйтеп үткәйнек инде.

“Алдар менән Зөһрә” эпик ҡомартҡыһында тартмалы композиция өҫтөнлөк итә. “Тартмалы (рамочная) композиция дөйөм эпик сюжеттың араһына үҙ аллы

сюжетлы хикмәттәр, хикәйәләр, хикәйәттәр ҡушып ебәреү менән характерлана. Улар әҫәрҙә төп мотивты көсәйтеүгә, тәрәнерәк һүрәтләүгә булышлыҡ итә. Йәки бер сюжетты өҫтәмә рәүешле күргәҙмәле, кинәйәле мәғәнәле итешә"[14], — тип билдәләй академик Ғ.Хөсәйенов.

"Алдар менән Зөһрә" әҫәрендә төп сюжет һыҙығынан башҡа бихисап ваҡиғаларҙы үҙ эсенә алған сюжеттар бар. Уларҙың ҡайһы берҙәрен Зөһрә һөйләй, һығымталар яһай. Уның һөйләгәндәренән сығып, төп герой характерының һыҙаттарын, заман проблемаларын асыҡ күрәбеҙ. Шулай уҡ әҫәрҙәге мөхәббәт романтикаһы, ваҡиғаларҙағы фантастик элементтар ҙа дастан жанрының традицияларына тап килә. Зөһрә һөйләгән хикәйәләр, иҫтәлектәр тартмалы композиция рухында. Әҫәрҙә былар барыһы ла бер үк ваҡытта сюжеттың өҫтәмә элементтары ролен дә башҡара.

"Алдар менән Зөһрә" эпик ҡомартҡыһындағы ваҡиғалар ябай ғына төйөнләнеүҙән башланып китә лә, артабан сюжет һыҙыҡтары тармаҡлана.

Боронғо башҡорт йәйләүендә йәшәгән Аллабирҙе исемле батырҙың ҡатыны, өс улы үлә. Яҡындары уны ҡабат ғаилә ҡорорға өгөтләй. Оҙаҡ ҡына икеләнгәндән һуң, ул Ирәндек буйында йәшәгән Зөһрә тигән ҡатынды барып күрмәк була. Дуҫы Йылҡыбай менән юлға сығалар. "Ҡуҙыйкүрпәс" ҡаһармандары кисергән ҡаршылыҡтарға оҡшаш юл кәртәләрен үтеп килеп еталәр, Зөһрәгә үҙҙәренең ниәттәрен әйтәләр. Зөһрә ризалашыуҙан алда үҙенең тормошо хаҡында хикәйәт һөйләргә, һуңынан ҡунаҡтарға бер шарт ҡуйырға була. Шулай Зөһрәнең хикәйәте башлана. Тап роман жанрындағыса, әҫәр бер нисә сюжет һыҙығына бүленеп китә (Аллабирҙе — Зөһрә, Алдар — Зөһрә, Байыегет — Гөлбоҫтан, Аҡкүбәк — Гөлбикә һыҙыҡтары һ.б.). Ҡулъяҙманың имен биттәрендә төп һүҙ Алдар — Зөһрә һыҙығы тирәһендә бара, йәғни нигеҙҙә ул Зөһрәнең хикәйәтенән тора.

Зөһрә ат сабыштарында, көрәштәрҙә егеттәргә лә ал бирмәҫ батыр булып үҫә, йәйләү малдарына эт-ҡош ябырыла ҡалһа, дуҫтарын әйҙәп, үҙе лә иҫ киткес батырлыҡтар күрһәтеп, мал-тыуарҙы һаҡлап алып ҡала. Ул хатта яҡын-тирәлә үҙенә тиң булырлыҡ пар таба алмай. Көндәрҙең береһендә Зөһрә бер күрәҙәсене эҙләп, ир-ат кейемендә юлға сыға. Юлда Болғар илсеһен, әүлиәне осрата. Улар икеһе лә батыр ҡыҙға юл өйрәтеп, кәңәштәр биреп, ярҙам итеп ебәрә. Зөһрә күрәҙәсе ҡартты табып, оҙаҡ ҡына һөйләшә, ҡарт уға башҡорт ырыуҙарының киләсәге хаҡында һөйләп бирә. Ҡайтҡас, ҡыҙ ялан башҡорттарының Алдар батырын осрата. Ул, Зөһрә хаҡында ишетеп, йәйләүҙәренә килеп сыҡҡан икән. Зөһрәнең ҡайтыуы хөрмәтенә үткәрелгән байрамда ҡыҙ менән егет икеһе лә күрше-тирәнән йыйылған ырыуҙар араһындағы ярыштарҙа иң көслөләр тип табыла. Туй үткәрәләр. Аҙаҡ бик күп мал, бүләктәр алып, йәштәр Алдар йәйләүенә ҡайтырға сыға. Юлда Муйнаҡ йәйләүен үтәләр. Муйнаҡ уларҙың туйында ыҙғышып, алдан ҡайтып киткән була. Алдарҙың аҡыллылығы, кешелеклеге арҡаһында улар Муйнаҡ һәм уның ырыуҙаштары менән ҡабат дуҫлаша. Малдарҙы туғай буйлап ебәрәләр, үҙҙәре тау аша тура юлдан ҡайтҡанда, Алдар, Зөһрә һәм уларҙың дуҫы Байыегет ҡырағай йыртҡыстар һәм дейеү менән алыша. Дейеүҙе үлтереп, уға ҡоллоҡҡа эләккән байтаҡ кешеләрҙе ҡотҡаралар. Әҫәр батырҙарҙың Алдар йәйләүенә ҡайтып етеүе менән өҙөлә. Зөһрәнең Аллабирҙегә һәм Йылҡыбайға һөйләүе буйынса, артабан йәйләүҙә бәхетле йәшәүҙәре, уның Алдарҙан улы тыуыуы,

ләкин тиҙҙән Алдарҙың да, улының да үлеп ҡалыуы билдәле. Дастанда артабан Зөһрәнең ҡунаҡтарға биргән шарты, шулай уҡ Аллабирҙегә кейәүгә сығыуы тураһында ла һүҙ буласағы аңлашыла. Хикәйәләү стиленә ҡарағанда, былар ҙа байтаҡ күләмде алырға тейеш һымаҡ. Ләкин ҡульяҙманың беҙгә килеп еткән өлөшө лә бөтөн бер әҫәрҙе күҙ алдына баҫтыра. (Ҡульяҙма сюжет тамамланмаған көйөнсә өҙөлөп ҡала. Уның күп кенә биттәре юғалған)[15].

Был ике ҡульяҙма ҡомартҡының нигеҙендә дуҫлыҡ, берҙәмлек идеяһы ята. Ләкин ул ике әҫәрҙә ике киңлектә сағыла. "Алдар менән Зөһрә"лә асылда башҡорт ырыу һәм ҡәбиләләренең үҙ-ара берләшеүе тураһында һүҙ бара. Уларҙың билгән йәки бүтән ырыуҙар менән аралашып йөрөгән ерҙәре Һаҡмарҙан алып Ағиҙел тамағына тиклем географик киңлекте иңләй. Ғаилә ҡороу ярҙамында ырыу-ара туғанлашыу, байрамдарҙағы ғәзел көрәш, уйын-көлкө, күмәк һунар һәм башҡа төрлө кәсеп аша аралашып, ырыу-ҡәбиләләр татыулығын нығытыу мотивы әҫәрҙең бөтә сюжетына һалынған.

Шулай уҡ айырым эпизодтар, деталдәр ҙә авторҙың ошо тәңгәлдәге уй-фекерен артабан нығытыуға, төрлө яҡлап раҫлауға йүнәлдерелгән. Алдарҙың Муйнаҡ бей менән ыҙғышыуы һәм аҙаҡ ҡабат ярашыуы — ошо характерҙағы бик асыҡ эпизод. Дуҫлыҡ, туғанлыҡ фекере ҡульяҙманың тәүге биттәренән үк башҡорт халҡының тормош-көнкүрешенә, йәшәү рәүешенә, ғөрөф-ғәҙәттәренә ыңғай баһа биреп, автор уҡыусыла уларға һоҡланыу һәм ғорурлыҡ тойғоһо уятырға тырыша. Әҫәрҙең төрлө урындарында башҡорттарҙың күршеләре — ҡарағалпаҡтар, нуғайҙар, төрөкмәндәр телгә алына. Болғар дәүләтенең илсеһе образы индерелә. Йәғни күршеләр менән дә татыу, ыҙғыш-талашһыҙ һыйышып йәшәү мәсьәләһе ҡуйыла.

"Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпик ҡомартҡыһында ла дастан жанры формалары ярылып ята. Әҫәрҙең нигеҙен тәшкил иткән тарихи ваҡиғалар романтик рухта һүрәтләнгән, ҡоршаулы композицияға нигеҙләнгән. Ҡомартҡыла яҙма дастан традициялары өҫтөнлөк итә.

"Иҙеүкәй менән Мораҙым" Дим һәм Туҡсоран яҡтарында Мөхәмәтша Буранғолов тарафынан 1910 йылда Ғимаҙи Ҡасҡыновтан яҙып алынған, уның нигеҙендә — 1762 йылғы ҡульяҙма. Бынан тыш, әҫәрҙең унға яҡын варианты һәм яҙмаһы билдәле. Улар араһында 1928 йылда Өфөлә йәшәгән татар яҙыусыһы Нәҡи Исәнбәт хәҙерге Баймаҡ районы Төркмән һәм Нуғай ауылдарында яҙып алған һәм 30-сы йылдарҙа Мөхәмәтша Буранғолов, Рәшит Ниғмәти, Баязит Бикбайҙар тарафынан төҙөлгән йыйылма вариант та бар. Һуңғыһы тәү тапҡыр "Ватандаш" журналында донъя күрҙе (1997, №1—4). "Иҙеүкәй менән Мораҙым" әҫәре ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, үзбәк, төрөкмән, нуғай халыҡтарында ла киң таралған. Күп кенә төрки халыҡтар өсөн уртаҡ булыуға ҡарамаҫтан, "Иҙеүкәй менән Мораҙым" дастаны башҡорт халҡының тарихына ныҡлап ерләшкән, баштан-аяҡ башҡорт халҡының тарихына бәйле ваҡиғаларҙы хикәйә итә[16].

"Иҙеүкәй менән Мораҙым" дастанының нигеҙендә XIV быуат аҙаҡтарында һәм XV быуат баштарында Алтын Урҙаның емерелә барыуына бәйле ваҡиғалар ята. Билдәле булыуынса, Алтын Урҙа дәүләте XIII быуат баштарында татар-монгол яулап алыуҙары һөҙөмтәһендә иҫ киткес ҙур биләмәлә формалаша, хәҙерге Ҡытай, Иран, Урта Азия, Кавказ, Ҡырым, Волга, Урал төбәктәрендә йәшәгән тиҫтәләгән халыҡтар, шул иҫәптән башҡорттар ҙа Алтын Урҙа ханда-

ры ҡулы аҫтында ҡала. Атап әйткәндә, татар-монголдарҙың башҡорт ерҙәрен яулап алыуы 1236 йылда башлана. Ҡорал көсө менән ойошторолған был дәүләткә нигеҙ һалыусы булып Сыңғыҙ хандың (1155—1227) ейәне Батый хан (1208—1255) һанала.

Алтын Урҙа хандары башҡорт иленә ҡоллоҡ һәм бөлгөнлөк алып килә:

Ойошоп ятҡан ҙур йортто
Өрккән ҡуйҙай итер хан;
Арыҫландай ирҙәрҙе
Йыуаш ҡуйҙай итер хан.
Иленде алыр ҡулынан,
Ғәскәр алыр улынан,
Тартып алыр малынды,
Иҫәпкә алыр барынды,
Боғаҙламай эсер ҡанынды,
Үлтермәй алыр йәненде, ау,
Үлтермәй алыр йәненде[17].

"Иҙеүкәй менән Мораҙым" дастанында башҡорт халҡының ана шундай хандарға, Алтын Урҙа хакимлығына ҡаршы көрәше сағылып ҡалған. Әммә был көрәш Алтын Урҙа әмирҙәренең хакимлыҡ өсөн үҙ-ара ыҙғыш-талашын, һуйыш-үлтерешен, киҫкен мөнәсәбәттәрен һүрәтләү араһында бирелә. Шуны ғына әйтеү ҙә етә: Алтын Урҙа башында 1357—1380 йылдарҙа ғына ла, йәғни 23 йылда, егерме биштән артыҡ хан алмашыныуы билдәле.

Тарихи шәхес булған Идеге (Идиге, Идику, Едигей, Иҙеүкәй) хаҡында аныҡ ҡына биографик мәғлүмәттәр һаҡланмаған, хатта уның тыуған йылы ла, урыны ла, ата-әсәһенең кем булыуы ла асыҡ билдәле түгел. Эпостың төрлө милли варианттарында, мәҫәлән, Идегенең атаһы тип Туҡтамыш хандың ҡошсоһо (йәғни бөркөт, ыласын кеүек һунар ҡоштарын ҡарап тороусы) Ҡотлоҡая, йә булмаһа мосолман әүлиәһе Баба Төкләҫ күрһәтелә. Шуныһы характерлы: уларҙың һәр береһе теге йәки был халыҡтың тарихына ерләштереп һүрәтләнә[18]. "Иҙеүкәй менән Мораҙым"дың М.Буранғолов вариантында, мәҫәлән, Иҙеүкәйҙең атаһы Ҡотло — һунарсы, ә тыуып-үҫкән төйәге — Дим буйындағы Нарыҫтау. Дастан Иҙеүкәйҙең ҡаберен дә Нарыҫтауҙа тип билдәләй.

Әле әйтелгәндәрҙән шул аңлашыла: башҡорт дастаны тарихи шәхес Идегенең үҙен дә, уның атаһын да башҡортлаштырып, башҡорт тупрағына ерләштереп һүрәтләй, хатта уның исемен дә Иҙеүкәй тип башҡорт теле ҡалыбына һала. Ләкин шуны әйтергә кәрәк: асылда иһә үҙенең сығышы менән тарихи Идегенең башҡорттарға бер ниндәй ҙә бәйләнеше юҡ. Идеге — татар-монгол яуы ваҡытында монголдарҙың Урал (Яйыҡ) төбәгендә тороп ҡалған манғыт ырыуы кешеһе, һуңынан Алтын Урҙа ханы Туҡтамыштың төмән етәксеһе. "Иҙеүкәй менән Мораҙым"дың М.Буранғолов вариантында Иҙеүкәй баштан уҡ батыр ир-егет булып күҙ алдына баҫа. Әҫәр Алтын Урҙа башында "күп илде ҡолдай итеп биләгән", "үҙ тигәнсә эш итеп, бер Хоҙайҙай йөшәгән" Туҡтамыш хандың ултырыуы һәм башҡорттарҙың уға баш әймәй тартышыуын хикәйәләүҙән башланып китә. Уралдағы Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Тамъян, Табын батырҙары, йәғни ете ырыуҙың бишеһе, Алтын Урҙаға яһаҡ түләмәү, ҡолдар алдырмау, үҙ аллы иркенлектә йәшәү өсөн ҡанға-ҡан килеп Туҡтамыш менән һуғышып йәшәй. Алтын Урҙа һарайынан илсе сифатында Шәғәле

уларға Туҡтамыштан фарман килтереп, биш батырҙы “кәңәш итер бей” итеп саҡырғандан һуң ғына батырҙар хан һарайына барырға булған:

Биш батыры бей булып,
Ҡотло, Иҫән һунарсы —
Бары бергә ҡушылып,
Етәүһе киткән Урҙаға[19].

Әммә Ҡотло улы Иҙеүкәй хан ебәргән фарманға баш эймәй, Уралда тороп ҡала.

Артабан беҙ Иҙеүкәйҙе Туҡтамыш һарайында күрәбеҙ. Бындағы ваҡиғалар, йәғни Иҙеүкәйҙең һарайға баш бей итеп ҡуйылыуы, хан ҡыҙы Ынйы менән танышыуы, ҡол ҡыҙы Ғәнәкәне яратып, унан улы тыуыуы, ханбикәнең, төш күрҙем, тип Иҙеүкәйҙе ире Туҡтамышҡа ошаҡлауы, был эшкә “Ҡара диңгеҙ буйында илен талап, ҡан эсеп”, үҙ иленә һыймайынса Туҡтамышҡа һыйынып, уның ҡыҙын алып, баш бей булып йөрөргә хыялланған Сәләхиҙең ҡушылыуы, Иҙеүкәйҙең Уралға ҡасып китеүе әҫәрҙең бөтә варианттарында ла тиерлек тап килә. Бына ошо ваҡиғалар эсендә дастандағы төп конфликт — Туҡтамыш менән Иҙеүкәй араһында дошманлыҡ формалаша.

Шуныһы асыҡ төҫмөрләнә: Иҙеүкәй хан һарайына Туҡтамыштың ҡат-ҡат саҡырыуы буйынса килә. Әммә һарайҙа ул Уралдан киткән батырҙарҙың хан ҡушҡанды ғына эшләп, ил талап йөрөүен дә күрә. Сәләхи Туҡтамыш ханға: “Иҙеүкәйҙе баш бей итеп ҡуйыу ҡулай булмаҫ”[20], — ти.

Туҡтамыш хан, Сәләхи кәңәшен тотмайынса, Иҙеүкәйҙе баш бей итеп ҡуйырға фарманын биргән, ти. Был инде Алтын Урҙа һарайындағы ығы-зығылы мөнәсәбәттәрҙең артабан киҫкенләшеүенә килтерә. Һарайҙа Иҙеүкәйҙең абруйы арта барыуы, бәйгеләрҙә, ат сабыштарында, көрәштә, атышта бер кемгә лә ал бирмәүе был киҫкенлекте көсәйтеп кенә ебәрә. Өҫтәүенә, был мөнәсәбәттәрҙең киҫкенләшеүе ханбикәнең мәкерле уйҙары, Сәләхиҙең ошаҡлашыуы, Ынйының көнләшеүҙәре менән артабан ҡырҡыулаша, һәм Иҙеүкәй, үҙенә ҡурҡыныс янауы тураһында Иҫәнбайҙың иҫкәртеүен тыңлап, Уралға сығып ҡаса. Туҡтамыш хан “Иҙеүкәй илен туплап, яу менән килер” тип артынан сапҡындар ебәрә, уға ни теләһә шуны бирергә вәғәҙә итә. Әммә Иҙеүкәй, Янбайҙың өгөтләүҙәренә ҡарамай, үҙ һүҙендә ҡала һәм, Туҡтамышҡа ҡаршы яу асыу өсөн ярҙам һорап, Сатмыр ханға, йәғни 1370 йылдан башлап бөгөн Сәмәрҡәндтә булған Урта Азия әмире Тимергә (1336—1405) китә. Туҡтамыш 1380 йылда Куликово һуғышында Мамай еңелгәндән һуң, Тимер ярҙамында Алтын Урҙаға хан булып ултыра, әммә һуңынан хакимлығын нығайтеү өсөн Тимер менән көрәш башлай. Шуға күрә лә үҙенең дошманы Туҡтамыш ханға яу асыр өсөн Сатмыр хан Иҙеүкәйгә ғәскәр бирә һәм Иҙеүкәй Уралға сыға.

Сюжеттың тап бына ошо ерендә, әҫәрҙең М.Буранғолов варианты буйынса, ваҡиғалар араһына батырҙарҙың икенсе быуыны, Идегенең кинйә улы Нурадин (башҡорт дастанында — Мораҙым) килеп инә. Уның тыуған йылы билдәле түгел. 1426 йылдан башлап, йәғни Алтын Урҙа тамам емерелгәс, Нуғай Урҙаһында әмир булып ултырған кеше. Хакимлыҡ өсөн көрәш ваҡытында, ҡон алаһы буйынса, 1440 йылда үлтерелә.

Дастандың аҙағында беҙ Иҙеүкәй менән Мораҙымдың Туҡтамыш ғәскәрен тар-мар итеүен күрәбеҙ. Бер вариант буйынса, уны Иҙеүкәй, икенсеһендә Мораҙым үлтерә.





Туҡтамыш хан яҙмышы дастанда бына шулай тамамлана. Был осраҡта шуны айырып әйтергә кәрәк: Иҙеүкәй Туҡтамыш ханды хакимлыҡ өсөн көрәштә түгел, ә уның халыҡҡа ҡарата ҡанһыҙлығы, “ҡанын ҡоймай малының, тереләй тотоп ашаған иң усалдың береһе”[21] булғаны өсөн үлтерә, ә илгә хан итеп уның улы Ҡадирҙы билдәләп ҡуя. Ошоноң менән әҫәр тағы бер тапҡыр Иҙеүкәйҙең илдә ғәҙеллек өсөн көрәшеүсе батыр икәнлегенә баҫым яһай.

Әммә шуны ла әйтергә кәрәк: дастан барлыҡ геройҙарҙың да фажиғәле үлеме менән тамамлана, хатта Мораҙымдың бүләре лә, күп йылдар үткәс, ҡон йолаһы буйынса “ҡулға алынып, дошмандан үлтерелеп хур булған”[22].

Был юлдарҙа тәрән мәғәнә ята: ил хакимдары араһындағы ыҙғыш-талаш Иҙеүкәй нәҫелен дә, Туҡтамыш тоҡомон да юҡҡа сығара, шул рәүешле уларҙың нәҫел ебе үҫеүҙән туҡтап ҡала. Урта быуаттарҙың әхлаҡи ҡараштары күҙлегенән ҡарағанда, кеше өсөн ошонан да ҙур язаны уйлап табыуы ауыр. Шулай итеп, дастанда, асыҡтан-асыҡ әйтелмәһә лә, илдәр һәм халыҡтар араһындағы яулашыуҙар, үлтерешеүҙәр ғәйепләнә. Бынан сығып шундай һығымта яһарға мөмкин: үҙенең идея-эстетик йүнәлеше менән “Иҙеүкәй менән Мораҙым” дастаны шаҡтай ҡатмарлы, хатта ҡаршылыҡлы әҫәр. Бер яҡтан, ул башҡорт иленең азатлығы өсөн көрәшеүсе үҙенең батырҙарын ололап дан йырлай, икенсе яҡтан, үҙ-ара ыҙғыш-талаш, яулашыуҙарҙың халыҡ өсөн, киләсәк өсөн ни хәтле афәт килтереүен дә иҫкәртә, “үлтерелеп хур булған” батырҙар хаҡында ла онотмай.

Шулай итеп, көнсығыш әҙәбиәтендә барлыҡҡа килеп, Урта Азия, Урал-Иҙел буйы халыҡтары әҙәбиәтендә ҙур урынды биләгән дастан жанрының бай традициялары, жанр формаларының үҫеш үҙенсәлектәре бөгөнгө көнгә тиклем дауам итә. “Прозаические и стихотворные дастаны. Дастаны как романтические эпопейные поэмы — маснави (“Хосров и Ширин”, “Тахир и Зухра” и др.). Дастанные фольклорные циклы — “Короглы”, “Алпамыш” и др. Приемы гиперболизации, идеализации героя в дастане, преобладание любовно-романтических сюжетных линий, фантастических, приключенческих ситуаций”[23], — тип билдәләй профессор Р.Байымов. Тағы ла уның ошо фекере лә төплө, үҙенсәлекле: “Дастан, кисса, хикаят аналогичны жанровым формам европейской литературы: роману, повести, рассказу. Дастан, например, как и роман, особенно роман-эпопея, — со сложной структурой, “ящичной” композицией и “рамочным” сюжетом; кисса, как и повесть — несколько проще, преимущественно с одним героем, одной сюжетной линией. Особенности восточных эпических форм в другом: например, дастан иногда называют сказочным романом (дастан “Семь приключений Хатема”). И действительно, в отличие от романа или повести, в дастане очень часто обрабатываются сказочные сюжеты, используются древние мифы, легенды и предания. В дастане повествование идет в романтическом ключе, рядом с историческим присутствует фольклорное и мифологическое. Отличается восточная проза и средствами изображения: романтический стиль, сложная образность, метафоричность, иносказательность. Дастаны могут быть и прозаическими, и поэтическими, нередко проза чередуется с поэзией, стихотворными вставками”[24].

Әгәр ҙә “Буҙйегет”, “Таһир менән Зөһрә”, “Сәйфелмөлөк”, “Алдар менән Зөһрә” эпик ҡомартҡыларында мифик башланғыс менән бергә тартмалы композицияла әкиәт сюжеттары ла йыш осрай. Әлбиттә, романтик мөхәббәт

ваҡиғалары аша заман проблемалары, үҙ-ара бәйләнештәр, кешеләр араһындағы ҡатмарлы мөнәсәбәттәр ҙә сағылыш таба. Дастан геройҙарының характеры ошо ҡатмарлы ваҡиғалар, ситуациялар аша асыла. Шулай уҡ был әҫәрҙәрҙә фольклор поэтикаһының да үрелеп килеүен күрәбеҙ.

"Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпик яҙма ҡомартҡыһында тарихи ваҡиғалар өҫтөнлөк итә. Шулай ҙа романтик стилдәге һүрәтләү саралары жанр формаһын байытып, әҫәрҙе уҡымлы итә. Әҫәрҙең күпселек варианттары шиғри телмәргә ҡоролған. Шулай уҡ әҫәрҙә эпик һәм географик киңлек, ваҡыт арауығы ла жанр ҡанундарына тура килә.

Шулай итеп, урта быуаттарҙа, "күсмә сюжетҡа" нигеҙләнеп, башҡорт ерлегендә барлыҡҡа килгән "Буҙйегет", "Таһир менән Зөһрә", "Сәйфелмөлөк", "Алдар менән Зөһрә", "Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпик ҡомартҡыларында дастан жанры формалары өҫтөнлөк итә. Дастан традициялары фольклор поэтикаһы менән үрелеп, милли әҙәбиәттә ҡабатланғыһыҙ, үҙенсәлекле, бай әҙәби әҫәрҙәрҙе барлыҡҡа килтерә.

### Иҫкәрмәләр

[1] *Хөсәйенов Ғ.Б.* Башҡорт әҙәбиәтенең поэтикаһы. Беренсе киҫәк. Теоретик поэтика. — Өфө: Ғилем, 2006. — 38-се бит.
[2] *Байымов Р.Н.* Төрлө йылдарҙа тыуған уйҙар; Һайланма мәҡәләләр. — Өфө; Ғилем, 2007. — 63-сө бит.
[3] Литературная энциклопедия терминов и понятий/под ред. А.Н.Николюкина. Институт науч. информации по общественным наукам РАН. — М.: НПК "Интелвак", 2003. — С.105.
[4] *Хөсәйенов Ғ.Б.* Башҡорт әҙәбиәтенең поэтикаһы. Беренсе киҫәк. Теоретик поэтика. — Өфө: Ғилем, 2006. — 78-се бит.
[5] Буҙйегет // Башҡорт халыҡ ижады. VI том. Эпос. — Өфө: Китап, 2002. — 266-сы бит.
[6] Буҙйегет // Башҡорт халыҡ ижады. VI том. Эпос. — Өфө: Китап, 2002. — 270-се бит.
[7] Краткая литературная энциклопедия. — М.: "Советская энциклопедия", 1964. — С.530.
[8] Буҙйегет// Башҡорт халыҡ ижады. VI том. — Өфө: Китап, 2002. — 266-сы бит.
[9] *Сөләймәнов Ә.* Дастандың әкиәткә тартҡаны//Башҡорт халыҡ ижады. VI том. — Өфө: Китап, 2002. — 437-се бит.
[10] Башҡорт халыҡ ижады. VI том. Эпос. — Өфө: Китап, 2002. — 376-сы бит.
[11] Башҡорт халыҡ ижады. VI том. Эпос. — Өфө: Китап, 2002. — 377-се бит.
[12] *Хөсәйенов Ғ.* Яҙма культура һәм дастанлыҡ//Башҡорт әҙәбиәте тарихы. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990. — 165-се бит.
[13] Башҡорт халыҡ ижады. VI том. Эпос. — Өфө: Китап, 2002. — 425-се бит.
[14] *Хөсәйенов Ғ.* Башҡорт әҙәбиәтенең поэтикаһы. Беренсе киҫәк. Теоретик поэтика. — Өфө: Ғилем, 2006. — 44-се бит.
[15] Башҡорт әҙәбиәте тарихы. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте. 1990. — 387-се бит.
[16] *Галин С.А.* Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. — Өфө: Китап, 2004. — 291-се бит.
[17] Башҡорт халыҡ ижады. VI том. Эпос. — Өфө: Китап, 2002. — 425-се бит.
[18] *Галин С.А.* Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. — Өфө: Китап, 2004. — 291-се бит.
[19] Башҡорт халыҡ ижады. VI том. Эпос. — Өфө: Китап, 2002. — 430-сы бит.
[20] Башҡорт халыҡ ижады. VI том. Эпос. — Өфө: Китап, 2002. — 427-се бит.
[21] Башҡорт халыҡ ижады. VI том. Эпос. — Өфө: Китап, 2002. — 428-се бит.
[22] Шунда уҡ.
[23] *Байымов Р.* Великие лики и литературные памятники Востока. — Уфа: Гилем, 2005. — 427.
[24] *Байымов Р.* Великие лики и литературные памятники Востока. — Уфа: Гилем, 2005. — 24.